# Әбйәлилдең данлыҡлы улы.

# Өмөтбаев Рамаҙан Ғимран улы



## Биографияһы

1924 йылдың 7 апрелендә хәҙерге Әбйәлил районының Әлмөхәмәт ауылында тыуған.
Ишле ғаиләлә баш бала булып тыуа. Халыҡ ижадына ынтылышы малайҙа иртә асыла. Колхоз һәм район һабантуйҙарында башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарып беренсе урындар ала. 1939 йылдың декабрендә Совет-фин һуғышы башланғас, 9-сы класта уҡыған Рамаҙан йәйәүләп Белорет ҡалаһына осоу мәктәбенә уҡырға инергә сығып китә, әммә, йәше тулмай, уны мәктәпкә алмайҙар. 1941 йылда, урта мәктәпте маҡтау грамотаһы менән тамамлап, торф ҡырҡыусы булып Баймаҡ баҡыр иретеү заводында эшкә төшә. Бында ул буласаҡ ҡатыны Мөхтәрәмә Таһир ҡыҙы менән таныша.

## Һуғыш йылдары

1942 йыл башында үҙ теләге менән фронтҡа китә. 1943 йылдың йәйендә Курск дуғаһы яуында ҡатнаша, Орёл ҡалаһы янында ауыр контузиялана. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә дауаланып, кире сафҡа инә һәм 11-се гвардия армияһы составында Балтика дәүләттәрен дошмандан ҡайтарыуҙа ҡатнаша.

**Хеҙмәт юлы**

1945 йылдың ноябренән башлап «Сибайалтын» рудникгында эшләй, рудниктың комсомол ойошмаһының сәркәтибе була. 1947 йылда КПСС-тың Баймаҡ райкомында эшләй, унда район комитетының беренсе сәркәтибе урынына тиклем үрләй. Ошо йылдарҙа Рамаҙан Өмөтбаев сиҙәм ерҙәрен күтәреүҙә әүҙем ҡатнаша. 1960 йылда Рамаҙан Ғимран улын КПСС-тың Башҡорт обкомына партия органдары бүлеге етәксеһе итеп күсерәләр.

Сәйәси темаларға арналған китаптары донъя күрә. 1965—1967 йылдарҙа - Мәскәүҙең йәмғиәт фәндәре академияһы аспиранты. Бында Рамаҙан Өмөтбаев иҡтисад фәндәре кандидаты, иктисад буйынса бер нисә китап авторы була.

1967 -1975 йылдарҙа Башҡорт АССР-ның Министрҙар Советы рәйесе урынбаҫары булып эшләй.

1982 йылдарҙа хеҙмәт юлын БАССР-ҙың Кинофикация буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһында тамалай.

**Үлеме**

1997 йылдың 24 авгусында, Баймаҡ районы уҡытыусылары конференцияһынан ҡайтып, хәләл ефете Мөхтәрәмә Таһир ҡыҙы менән бер көндә яҡты донъя менән хушлаша. Өфө ҡалаһының Мосолман зыяратында ерләнгән.

# Донъя күргән әҫәрҙәре

«Сиҙәмдең тәүге яҙы» (1984 й.),
«Һылыубикә әбей» хикәйәләр йыйынтығы (1987 й.),
«Башҡорт аты» очеркы,
«Һарығолаҡ» хикәйәһе (ике сериялы нәфис фильм төшөрөлдө),
«Генерал Кусимов» (1990 й., башҡ. тел.),
«Генерал Кусимов» китабы (1995 й.),
«Ирәндектең күкһел томаны» романы (1993 й.),
«Баймаҡ баҡыр заводы тарих сатында» (1995 й.),
«Осрашыуҙар һәм юғалтыуҙар» публицистик йыйынтыҡ (1997й.),
«Боролош» (1999 год),
«Атлы башҡорт» йыйынтығы (2004 й.).
«Генерал Кусимов» (2010 й., Еңеүҙең 65-йыллығына арналған китап)
"Көмөш дағa" повесы ( "Агиҙел" журналы, 2010 й.)
"Ҡурайсы", "Беренсе һөйөү", "Ҡомар", "Агиҙел" журналы (2005 й., 2009 й., 2010 й.)

- **Маҡтаулы исемдәре**
- Рамаҙан Өмөтбаевтың данлы хеҙмәте төрлө яҡлап баһалана: Ленин ордены, Ватан һуғышының I һәм II дәрәжәһе, «Дан билдәһе», БАССР-ҙың Юғары Советы Хөрмәт грамоталары.
- Рәсәй Президенты Указы менән 1994 й. «Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре» исеме бирелде.
- Рамаҙан Ғимран улы - РСФСР-ҙың Халыҡ мәғарифы отличнигы, алты тапҡыр БАССР-ҙың Юғары Советы депутаты булып һайланған, уның Президиумы ағзаһы, КПСС-тың XXI съезы делегаты. Ким Әхмәҙйәнов ис. премияһының беренсе лауреаты. Баймаҡ районы һәм Баймаҡ ҡалаһы Почетлы гражданы.

**Музейҙар һәм хәтер**

Өфөлә, Баймаҡта, Сибайҙа йәшәгән һәм эшләгән биналарҙа мемориаль таҡталар урынлаштырылған.

2005 й. апрелендә Сибай ҡалаһының 13-сө лицейына Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге Башҡорт гимназияһы исеме бирелде, 2006 й. бында Рамаҙан Өмөтбаев музейы асылды. Алдынғы гимназистар яҙыусының тыуған көнөндә - 7 апрель көнө - уның исемен йөрөткән премия менән бүләкләнәләр.

Сибай ҡалаһында Рамаҙан Өмөтбаев исемендәге әҙәбиәт өлкәһендәге премия йыл һайын Республика көнөндә тапшырыла. Әбйәлил һәм Баймаҡ райондарында яҡташтарына бағышлап үткәрелгән хәтер кисәләре, әҙәбиәт кистәре йолаға әүерелде.

**Рамаҙан Өмөтбаев исемен йөрөтәләр**

Сибай, Баймаҡ ҡалаларында, Асҡар, шулай уҡ Урал аръяғы ауылдарында урамдар;

Әлмөхәмәт ауылында мәктәп, Сибай ҡалаһы башҡорт гимназияһы.

# Өмөтбаевтар затынан

Райондың боронғо ауылдарының береһе — Әлмөхәмәт йәмле Оло Ҡыҙыл йылғаһының ике яҡ яры буйында урынлашҡан. Был данлыҡлы ауыл — Өмөтбаевтар ырыуының йәнтөйәге. Был билдәле фамилияның иң күренекле вәкиле — Р. Ғ. Өмөтбаев.

Рамазан Ғимран улы бөтә ғүмерен республика мәнфәғәтенә хеҙмәт итеүгә арнаны тип әйтеү һис арттырыу булмаç.

Ул 1924 йылда Ғимран Өмөтбаевтың ҙур ғаиләһендә тыуа. Атаһы заманаһы өсөн бик уҡымышлы кеше була, ул Троицк ҡалаһының «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә һәм Орскиҙа Мәғәҙи хәҙрәт мәҙрәсәһендә уҡый. Атаһы яғынан ата-бабалары — Ғәйзулла, Мөхәмәтвәли, Өмөтбай мосолман зыялылары араһында билдәле кешеләр була. Ғаилә ауыр көн күрә, шуға күрә Рамазан бала сағынан крәстиән хеҙмәте ауырлыҡтарын, арыш икмәге тәмен тойоп үçә. 1931 йылда ул Әлмөхәмәт башланғыс ...

... рендә фин һуғышы башлана. 9-сы класҡа килгән Рамазан йәйәүләп Белорет осоу мәктәбенә китә, ләкин унда 17 йәштән ҡабул итеү сәбәпле уҡырға инә алмай. Урта мәктәпте бөткәнгә тиклем йәйге һәм көҙгө айҙарҙа уға хисапсы, көтөүсе булырға, үҙен бөтә ауыл һөнәрҙәрендә һынап ҡарарға тура килә.

Мәктәпте Маҡтау грамотаһы менән тамамлап, кейем булмау арҡаһында сығарылыш кисәһен көтмәй, һуғыш башланыуға ике аҙна ҡалғас, Рамазан Өмөтбаев Баймаҡ баҡыр иретеү заводының 2-се һанлы торф участкаһына эшкә урынлаша. 1941 йылдың ноябренән ул Буденный исемендәге туған колхозында бухгалтер булып эшләй. 1942 йылдың ба-



«Ауыл хужалығы производствоһын махсуслаштырыу һәм уның иҡтисади әһәмиәте» монографияһы хәҙер ҙә көнүҙәк баçмалар булып тора.

1967 йылдан 1975 йылға тиклем Р. Өмөтбаев Ба-

... лаҡ» хикәйәһе үҙ ваҡытында йылдың иң яҡшы хикәйәһе тип танылa, уның буйынса нәфис телевизион фильм төшөрөлә.

Генерал Таһир Куси-

... мовтың ауыр һәм героик яҙмышын һүрәтләүсе китабы донъя күрә. Ул Бейек ...

аныҡ автор позицияһы бар, әҙип уны бер ҡасан да үҙгәртмәй». Ғәзим Шафиҡов «Уяныр ваҡыт етте», «Башҡорттар һаны нинә кәмей?», «Башҡорт аты» мәҡәләләрен күҙ уңында тотҡандыр, моғайын.

1995 йылда яҙыусының «Баймаҡ баҡыр заводы тарих сатында». китабы донъя күрә. Ул элекке баҡыр иретеү, хәҙерге Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге Баймаҡ машина төҙөү заводы тарихына арнала. «Осрашыуҙар һәм юғалтыуҙар» йыйынтығы сыға. Был китап республиканың күренекле яҙыусыларының, артистарының, ижтимағи-сәйәси эшмәкәрҙәренең тормошо һәм эше тураһында һөйләй. Йыйынтыҡта шулай уҡ Башҡортостан халҡы һәм тыуған ер яҙмышы хаҡында уйланыу-

атҡаҙанған мәҙәниәт хе... эткаре» исеменә лай... була. Ике ул тәрбиал... үстерәләр.

Ришат Өфө нефть ...ститутын тамамлай, ...больск нефтехимкомби...ты, Тажикстанда Рогу... ГЭС-ы, Смоленск, Ка... нин һәм Башҡортост... АЭС-тарын төҙөүҙә ҡат...ша. Уға Башҡортостан Р...публикаһының атҡаҙан... төҙөүсеһе исеме бире... Үкенескә ҡаршы, 1993 й...да ул монтаж эштәрен ...шҡарғанда фажиғәле һә... була. Уның эшен балала... — Булат һәм Регина ла... итә.

Кинйә улдары Рауил ... Өфө нефть институтын ...мамлай, ике тиçтә йыл ...гистраль нефть үткәргес...рендә эшләй. 45 йәше... ҡапыл эшмәкәрле... үҙгәртә һәм хәбәрсе бу... китә. «Башҡортоста... «Йәшлек» гәзиттәре ла...аты. Әле ул БР Прези...ты Хакимиәтендә эшл... Һуңғы йылдарҙа БР Дә... Йыйылышы Рәйесе... ҡәңәшсеһе. Район ме... бәйләнешен юғалтмай. ... бала — Шамил һ...

# Р. Өмөтбаев шәжәрәһе.

Майбәк – Сурхан – Әҙиғул – Яйҡар – Өмөтбай – Мөхәмәтвәли – Ғәйзулла – Ғимран – Рамазан – Рауил - Шамил